ВОСХОД
№7 (10054)
Пятница
24 февраля 2023 года
АРГАЯШ МЕДИА
ARGAYASH.COM

АРҒУЖА
БАШҠОРТ ТЕЛЕНДӘ МАХСУС БИТ №2 (143)
ФЕВРАЛЬ, 2023 ЙЫЛ

## ВАҠИҒА

# УРАЛ БАТЫР ӨЛГӨҺӨНДӘ

## СИЛӘБЕ ӨЛКӘҺЕ ХАЛЫҠТАР БЕРҘӘМЛЕГЕ ҮҘӘГЕНДӘ «АРЫҪЛАН» ИСЕМЛЕ УҒАТАРҘАР БЕРЛӘШМӘҺЕНЕҢ ОТЧЕТ КОНФЕРЕНЦИЯҺЫ БУЛЫП УҘҘЫ

**Конференция өс йыллыҡ эшкә һөҙөмтә яһау, шулай уҡ яңы ойошма төҙөү маҡсатынан үтте. «Арыҫлан» Арғаяш районы менән тығыҙ бәйләнештә: Туғыҙбай һәм Ҡолойҙа уҡ атыу турнирҙары уҙа, уҡ атыуға өйрәтеү секциялары эшләй, беҙҙә оҫта уҡсылар ҙа етерлек. Беҙ ҙә был конференцияла яҡындан ҡатнаштыҡ, берләшмә активистары менән боронғо хәрби сәнғәттең тергеҙелеүе хаҡында һөйләштек.**

Башҡорт халҡының «Урал батыр» эпосында төп герой мөғжизәле атты ауыҙлыҡлағансы, арыҫланға атланып йөрөй. Беҙҙең дә яңы ойошмабыҙҙың исеме «Арыҫлан» тип юҡҡа аталмаған. Бөгөнгө көндә «Арыҫлан» – Силәбе өлкәһе милли спорт төрҙәре берләшмәһе ул. Берләшмә етәксеһе Таһир Абдрафиҡов берләшмә планында тик уҡ атыу төрөн генә үҫтермәйәсәктәре хаҡында белдерҙе. Таяҡ тартыш, бүрәнә этеш, арҡан тартышҡа ла иғтибар бирәсәктәре тураһында һөйләне. Был спорт төрҙәре элек үткәрелгән һабантуйҙарҙа батырҙар көсөн һынау бәйгеһе булып торған.

### ТӨП ЙҮНӘЛЕШ

Традицион уҡтан атыу – спорт төрөнөң иң өҫтөнлөклөһө. Беҙгә билдәле булған «Ҡырыҫ уҡ» ойошмаһы «Арыҫлан» составында буласаҡ һәм уҡ атыу йүнәлешен үҫтерәсәк. Арғаяш районы менән ойошманы күп нәмә бәйләй: уҡ атыу хәрәкәтенә нигеҙ һалыусы Таһир Абдрафиҡовтың инәһе Ҡуйһары ауылынан, уҡсыларҙың күбеһе Арғаяш районынынҡылар. Туғыҙбайҙа Руслан Нафиҡовтың «Тамыр» этно-комплексында йәйге база булдырылған. Бәжекәй мәктәбендә беренсе грант проектын тормошҡа ашырыу йәһәтенән уҡ атыу секцияһы асылды. «Арғаяш-Медиа»ның уҡ атыу секцияһы асылыуын сағылдырған сюжеты социаль селтәрҙәрҙә киң танылыу тапты. Таһир белдереүенсә, барыһы ла ыңғай ғына булмаған икән. Уҡ атыу нөктәһенең мәктәп эсендә асылыуы ҡулай түгел. Бер нисә күңелһеҙ осраҡтан һуң, ситтән килеүселәргә лә, шул иҫәптән уҡсыларға ла мәктәп эсенә инеү тыйыла. Бары тик уҡытыусылар һәм уҡыусылар ғына секцияла шөғөлләнә алғандар. Уҡ атыу серҙәренә төшөндөрөүсе уҡытыусы эштән китә, уҡ атыуҙа әүҙем шөғөлләнгән уҡыусылар мәктәпте тамамлап сығалар.

Мәктәптәр менән нисек эшләргә – һорау асыҡ булып ҡала. Мәктәп залдарына инә алмау осраҡтарына башҡа спортсылар ҙа тарыйҙар. Шөғөлләнерлек иркен залдар күп ваҡыт тик мәктәптәрҙә генә, әммә унда инеү мөмкинселеге күптәргә эләкмәй.

### БЕРҘӘМЛЕКТӘ - КӨС

Күп осраҡта уҡтан атырға өйрәнеү үҫеш нөктәләренә әүерелде. Ҡолой ауылында уҡтан атыу дәрестәрен Дим Мөхәмәҙиев, Алик Латыпов алып бара. Златоуст һәм Миәс ҡалаларында «Ҡырыҫ Уҡсы» бүлексәләре үҫешә. Киләсәктә был сараларҙы тағы ла юғарыраҡ кимәлгә күтәрергә ниәтләйҙәр. Турнирҙарҙың абруйы күтәрелһен, ә уҡсыларыбыҙ призлы урындар яулауға ынтылып торһондар. Был спорт төрө камиллаша барыу өҫтөндә. Ысын уҡты ҡайһы берәүҙәр тик оҫталыҡ дәрестәрендә генә күрә алалар.

Руслан Нафиҡов үҙҙәрендә, Туғыҙбайҙа, уҡ атыу турнирҙарын үткәреү мөмкинселеге булыуы хаҡында белдерҙе. Ул бит үҙе лә Арғаяш районының уҡ атыу буйынса амбассадоры. «Уртаҡ эш башҡарабыҙ, уның файҙаһы ла буласаҡ. Мин егеттәрҙең һәр башланғысын хуплайым. Бергәләп үткәрергә уйлаған проекттарыбыҙҙы үҫтерергә ынтыласаҡбыҙ» – тип әйтә Руслан Нафиҡов. «Ҡырыҫ Уҡсы» һәм «Арыҫлан» берләшмәһенең PR-менеджеры Лилиә Манапова билдәләүенсә, шәхси оҫталыҡ-кластары, турнир ойоштороу майҙансыҡтары ихлас эшләп килә. Берләшмә ҡатнашыусылары – үҙҙәре уҡ атыусылар. «Беҙ Башҡортостан, күрше Свердловск өлкәһе уҙғарған бәйгеләрҙә ҡатнашып киләбеҙ. Бөтә Рәсәй кимәлендә ойошторолған конкурстарҙан да ситтә ҡалмайбыҙ. Мәскәү өлкәһе Орёл ҡалаһында ла мәргәнлеккә көс һынаштыҡ. Ике йыл рәттән уҡ атыу буйынса Рәсәй кубогында ал бирмәнек. Беҙҙең уҡсыбыҙ Эльвира Әминева 2-се урын яулап ҡыуандырҙы. Ике йыллыҡ тәжрибә менән Эльвира был ярышта тәүге тапҡыр һынау тотто. Еңелеүҙәр булған осраҡта күңел төшөнкөлөгөнә бирелмәйбеҙ. Улар һабағында яңы еңеҙәргә ынтылабыҙ. Үҙ өлгөбөҙҙә даими күнекмә үтеүҙәрҙең еңеүҙәр килтергәнен раҫлайбыҙ. Беҙ ҡала тормошонда, өлкә, ҡала хакимиәттәре ойошторған сараларҙа: ижтимағи-сәйәси вернисаждар, милли спорт төрҙәре «Традициялар уҙышы» фестивале, район, өлкә һабантуйҙарында әүҙем ҡатнашабыҙ,» – тине Лилиә Манапова.

Өлкә, ҡала хакимиәттәре уҡсыларға һәр яҡлап булышлыҡ күрһәтә. Йәмәғәт бәйләнештәре идараһы башлығы Дмитрий Семенов конференциябыҙҙың көтөп алған ҡунағы булды. Уның белдереүенсә, «Кырыҫ Уҡсы» проектының эше ҡыҙыҡлы һәм сағыу булды. «Традицион уҡтан атыуҙы ҡайтанан тергеҙеү – Көньяҡ Урал ғорурланған тарихи ваҡиғаларға, тарихи тамырҙарыбыҙға ҡайтыу ул. Был тарихи уҡты ни тиклем күберәк кеше ҡулына алһа, шул тиклем күберәк халыҡ башҡорттарҙың Наполеонға ҡаршы һуғышта, сит илдәрҙә барған яуҙарҙа ниндәй әһәмиәткә эйә булыуҙары хаҡында белә», – тип белдерҙе үҙ сығышында Дмитрий Игоревич.



Уҡтан атыу - матур тамаша. Фотоһүрәттә Ләйсән МӨХӘМӘҘИЕВА. **Гүзәл ШАҠАЕВА фотоһы.**

### ХЕҘМӘТТӘШЛЕК

Дмитрий Игоревичҡа теләктәшлеген белдереп, Башҡортостандың Силәбе өлкәһендәге даими вәкиле Әлфир Байымов: «Уҡ атыуҙы ҡайтанан тергеҙеүсе йәштәр башҡорт мәҙәниәтен үҫтереүгә һәм һаҡлауға ҙур өлөш индерәләр. Уҡ атыу бәйгеһендә ҡатнашырға әҙерләнеүсе башҡорт милли кейеменә, боронғо яу ҡоралына мөрәжәғәт итмәй ҡалмай,» – тине. Ул үҙ сиратында республикабыҙҙан тыш башҡорт телен һаҡлауға йүнәлтелгән Башҡортостан Башлығы грантынан ярҙам итәсәге хаҡында белдерҙе. Силәбе ҡалаһы хакимиәтенең йәмәғәт ойошмалары менән хеҙмәттәшлек итеү буйынса идараһы башлығы Вячеслав Борисов ойоштороусыларға саҡырыуҙары өсөн рәхмәтен белдерҙе һәм милләт-ара сараларҙың әһәмиәте хаҡында һөйләне. «Беҙ күберәк милли колоритлы проекттарҙы күрергә теләр инек. Был башланғыстарҙы беҙ хуплайбыҙ һәм спорт сараларынан да баш тартмайбыҙ,» – тине Вячеслав Юрьевич.

Конференция үткәреү өсөн майҙансыҡты Силәбе өлкәһе халыҡтар дуҫлығы Үҙәге бирҙе. Ойошма директоры Рауль Асатулин уҡсыларға милли спорт төрҙәрен күтәреп алыуҙары өсөн оло рәхмәтен еткерҙе. «Был спорт төрө йәштәрҙе эшһеҙлектән йолоп ала. Иҫегеҙгә төшөрәм: башҡорттар Силәбе өлкәһенең тәүге сик һаҡсылары булған, ә уларҙың ҡоралы – уҡ-һаҙаҡ. Көньяҡ Уралда үҙебеҙҙең уҡ эшләүселәребеҙҙе үҫтерергә ине. «Арыҫлан» уҡ атыу ойошмаһы рәйесе Таһир Абдрафиҡов Рауль Хәлил улының теләктәре менән килеште, сөнки бөгөнгө көндә уҡтарҙы Белоруссиянан, Омскиҙан, Екатеринбургтан заказ биреп эшләтергә тура килә.

Эйе, уҡтан атыу – өйрәнеү курстары ғына түгел, шулай уҡ ата-бабаларыбыҙҙың хәтеренә һәйкәл ҡойоу ул, тарихты, милли мәҙәниәтте тергеҙеү. Кисәге «Ҡырыҫ Уҡсы»лар бөгөнгө «Арыҫлан» берләшмәһе ағзалары мауыҡтырғыс, ҡыҙыҡлы юл башында торалар. Уларға уңышлыҡтар һәм яңы еңеүҙәр теләйһе ҡала.

## ФЕКЕР

**Әлфир БАЙЫМОВ,**
*Башҡортостандың Силәбе өлкәһендәге даими вәкиле:*



**Быйылғы йылда өлкә һабантуйы Арғаяш районында үтәсәк. Традициябыҙға ингәнсә, Башҡортостан Республикаһынан да вәкилдәр көтәбеҙ, Профессиональ сәнғәт коллективтары сығышы яңы номерҙәры менән шатландырасаҡ. Яңылыҡ та кертергә уйлайбыҙ: сауҙа һәм хеҙмәтләндереү министрлыҡтары ла көтөлә. Улар «Башҡортостан аҙыҡ-түлеге» проектына ярашлы, республикабыҙҙағы барлыҡ милли ризыҡтарҙы етештереүсе етештереүселәрҙе кәүҙәләндерәсәк.**

ШӘХЕС

«Арғужа» гәзитенең барлыҡ сығарылыштарын түбәнге QR код аша табырға була.

# ӘГӘР ҘӘ ЙӘШӘҮ ӨМӨТӨҢ ҺҮНҺӘ...

**Өфө ҡалаһының төп мәсете янында урынлашҡан йорт күп кешеле һәм шау-шыу менән тулы була. Бындағы йәшәү рәүешен өләсәй тота. Уның һүҙен Фатима исемле ҡыҙы һәм кейәүе, ошо мәсеттең ишаны, Минһажетдин Нуримановтың 12 балаһы, улы Һибәтулла Искәндәров һәм уның ҡатыны Йәмлиха һүҙһеҙ үтәй.**

Бына уларҙың Өфө ҡалаһы Александровск урамы, 47-се һанлы йотта урынлашҡан «М.В. Шанина фотоһүрәттәре» салонында төшкән иҫке портреттары. Һибәтулла дуҫы менән һалдат шинелендә. Ябыҡ ҡына Йәмлиха фотограф ҡулынан ҡояштан һаҡлай торған сатыр (парасольку) алып тотҡан. Мастер Йәмлиханы ҡайынбикәһе Хәнифә менән ситән эргәһендәге тургенев туташтары һымаҡ кәүҙәләндерергә тырышҡан. Ошо уңайҙан сәсенә матур прическа яһап, ҡупшы таҫма менән муйынына урап ҡуйған, яратҡан ҡулсәғәтен таҡҡан Хәнифәне алғы рәткә ултыртҡан. Ҡулсатыр тотҡан Йәмлиханы янына баҫтырған. Ишандың оло улы булған Сиражетдинды ултырғыс эргәһендә төшөргән. Үҫмер артлы ултырғысҡа бер ҡулы менән тотоноп, икенсе ҡулын арҡаһына һалып, донъяға ҡыйыу ҡарап, бик етди ҡиәфәттә ҡатып ҡалған. Шулай ҙа был һүрәттән буласаҡ Өфө мәсетенең уҡыта башлаған мөғәллименең ныҡлап йәшертергә тырышҡан бала йөҙөн, бүрткән ирендәрен тойомларға мөмкин. Ул көнө-төнөн мәсеттән ҡайтмай, Ҡөрьән уҡыған, ғәрәп телендә ирекле аралашырға ынтылған. Ҡараңғы төшкәс кенә, үҙ уйҙарына сумған көйө өйгә ҡайтҡан. Бер ваҡыт ул ҡараңғы урамда үҙ артынан күҙәтеп килеүсе шәүләләрҙе абайламай ҡала. Йортҡа баҫып ингән ҡараҡтар бер кемде лә аямаған. Өләсәйҙең, Һибәтулланың, Йәмлиханың, Сиражетдиндың йәндәре ҡыйыла. Ҡайғынан бөгөлөп төшкән Фатима бәләкәй ҡыҙын үлтерелгән апаһы исеме менән эҙләп саҡырырға тотона. Бер сәғәт эсендә тырым-тырағай килгән өй эсендә: «Хәнифә! Хәнифә!» – тигән һөрән ишетелә. Был әле киләсәктә күрәсәк оло бәләләрҙең башы ғына ине әле. Ҡасандыр ҙур ғаилә тип һаналған нигеҙҙе революция, граждандар һуғышы, репессия шауҡымдары һепереп ташлай.

Ярым һуҡырайған, ауырыу Минһажетдин ишан менән йәнәш, Өфө урамдарынан хәйер һорашып, мәңгелеккә Хәнифә исемен алған Әминә ҡыҙы атлай...

## ЯРҒОЯШ СТАНЦИЯҺЫНАН АЛЫҪ ТҮГЕЛ...

Бер ваҡыт, ике әбей менән хәйер һорашып йөрөгәнендә, Хәнифә үҫеп ултырған мөсһөҙ генә кесерткән ҡыуағына юлыға. «Был кемгә тейеш?» тигән һорау һауала эленеп ҡала. Асыҡҡан ҡыҙ ике ҡарт әбейҙән алда был көсһөҙ кесерткәнде өҙөп ҡабырға ла өлгөрә ине. Ниндәйҙер тылсым уны был уйынан ҡайтырға мәжбүр итә һәм: «Был – һеҙгә! Өҙөп ашағыҙ! Мин тағы табырмын әле,» – тип әйттертә. Хатта иң асыҡҡан мәлдәрҙә лә, урамда, тауыҡ ояһында төн уҙғарғанда ла, туберкулез дауаханаһы ҡалдыҡтарында соҡсонғанда ла атаһы Хәнифә менән әңгәмәләшеүҙән туҡтамай. Минһажетдин ҡыҙын үҙҙәрен көн һайын һағалаған тормош һынауҙарына бирешмәҫкә өндәй, Ҡөрьән тәғлимәттәрен өйрәтә. Сүрәләр еңеллек менән ҡыҙҙың аңына, ҡанына һеңә баралар.

Кемдер берәү ишанға баҫа барған аслыҡтан, шымсылар күҙәтеүенән Уралға ҡасып йәшеренергә кәңәш бирә. Улар Өфөнән сығып китәләр. Силәбе вокзалында, хәлһеҙлектән саҡ ҡыбырлап йөрөгәндәр араһынан, аслыҡтан үлгәндәр араһынан бер хеҙмәткәр, ишанды күреп ҡалып, улар янына килә. Атаһы рухына аят уҡытҡас, хәлдәрен һораша ла поезға билет һатып алып бирә. Былай тип иҫкәртә: «Ярғояш станцияһынан ары китмәгеҙ. Унда башҡорттар йәшәй. Улар һеҙҙе ярҙамһыҙ ҡалдырмаҫтар». Уларҙы Нуркин тигән ауыл бәләләрҙән ҡурсалап ҡала. Әбделғафа исемле ҡарт ҡатнашлығында бәләкәй генә баҙ өйө төҙөйҙәр. Был ер аҫты өйө ҡараңғы һәм тар була. Тегендә-бында ҡағылып-һуғылып йөрөгән ата һәм ҡыҙ өсөн үҙҙәренең тыуған усағы барлыҡҡа килә. Бер ваҡыт атаһы ҡыҙына: «Мин һинең алдында бурыслы. Күрһәткән изгелектәреңә яуап итеп, мин һине Хажға алып барасаҡмын». Хәнифә атаһының нимә тураһында һөйләгәненә тиҙ генә төшөнөп етмәй. Ислам дине ҡағиҙәләренә ярашлы, изге Мәккә ҡалаһына хаж ҡылыу хаҡында ишеткәне була. 1933 йыл бит ... Яңы ғына күргән ғазаптарҙан туҡталып өй төҙөп сыҡтылар. Хәҙер нисек хажға барырға һуң? Алыҫмы икән ул? Барып етә алырҙармы?! Атаһы ҡартайған, насар күрә... Тығыһыҙ уйҙар бер-бер артлы ҡыҙ башына яуа. Ҡыҙы күңелен асыҡ китап кеүек күреп, белеп торған ишан: «Нисек тә булһа барып етербеҙ... Ҡасан да булһа барып етербеҙ...» – тип йыуата. Арҙа ашалып бөтә.

Аяҡ ҡына кейемдәре ташлы һуҡмаҡтарҙа, ҡар тигеҙлектәрендә, бысраҡ юлдарҙа ашалып бөтә. Ҡалалар, ауылдар, бәләкәй биләмәләр үтәләр. Күп осраҡта асыҡ һауала йоҡларға тура килә. Хәйер һорашалар. Был мәлдә Рәсәйҙә ҡаты аслыҡ хөкөм һөрә. Кеше күрһәткән һәр изгелек ҙур бүләк тип ҡабул ителә. Ғәжәпкә ҡаршы, ярым һуҡыр ата юлды тиҙ тапҡан, алда уларға ниндәй һикәлтәләр осраясағын һиҙеп торған, хәүефһеҙ юлды һайлай алған. Совет Рәсәйендә хажға барыу тыйылған, үҙеңә үлем йә төрмә һайлау булған... Улар Сталиндың «Биш йыл Аллаһыҙ» тигән декрет ҡабул итеүен белмәйҙәр ҙә. 1937 йылдың майына барлыҡ ил Алла һүҙен бөтөнләй онотторға тейеш булып сыға.

Ата-ҡыҙ сәфәре ике йылға һуҙыла. Бына эҫе Баку ҙа, томра Бағҙат та артта ҡала. Улар Ғәрәбстанға Ҡорбан байрамына, зөлхизә айының һуңғы көндәренә килеп етәләр.



## ҠӘҒБӘ ЯҠТЫЛЫҒЫ

Һынауҙарҙың аҙағы яҡынлашҡан һайын, иң ауыры ҡала. Рәсәй юлын ҡайнар ҡомдар аша үткән Хәнифә табандары тотош күберсеп сыға. Хаж тыйыуҙарын боҙоп, ҡапыл Хәнифә илап ебәрә. Был осраҡта ла атаһы ҡыҙына ярҙамға килә: «Түҙ, ҡыҙым. Саҡ ҡына түҙ. Тиҙҙән күберсектәр урынына яңы тире үҫеп сығыр. Һин ауыртыу тоймаҫһың да». Атаһы һүҙе был юлы ла дөрөҫкә тап килә. Бына күптән көткән Мәккә һәм Мәҙинә стеналары!.. Аслыҡ та онотола. Хаж ҡылыусыларға бәләкәй генә һауытҡа һалып бирелгән итле һурпа көн оҙонона етә. Хаж ҡылыусылар араһында улар ихрам кейемен кейеп, Бәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) мәсетендә намаҙ уҡыйҙар. Был мәсет стеналары Ҡөрьән сүрәләре һәм Мөхәммәт хәҙистәре менән тулы була. Мөхәммәт бәйғәмбәр йөрөгән һуҡмаҡ буйлап Ҡөрьән сүрәләрен телдән уҡый-уҡый уның ҡәберенә бара Хәнифә. Ошо изге ерҙә ул сафланып, аң тәрәнлегенә төшөнә. Ҡыҙҙы һуҡыр ишанды оҙатыусы булараҡ ҡәбергә инергә рөхсәт итәләр. Ҡасандыр атаһы Ноғоман 13 йәшлек Минһажетдин улын да хаж ҡылырға ошнда килтергән булған. Бына уға ла үҙ ҡыҙын Мәккәгә алып килергә насип була. Мөхәммәт бәйғәмбәр шәкерттәре ҡәберлеге янынан үтешләй, Хәнифә атаһы атаһы күрһәткән изгелектең мөһимлегенә тағы бер ҡат инана. Ҡәберлектән төшкән йылы, күңелле сағыу яҡтылыҡты күргән ҡыҙ үҙ-үҙенә ошолай тип нәҙер әйтә: «Ошо изге ергә етеү өсөн миңә күп тапҡырҙар ғазап уттары аша үтергә тура килде. Хаж сәфәре ҡылдырған атам алдында бөйөк бәйғәмбәребеҙгә, ислам диненә ғүмерем буйы тоғро ҡаласағымды белдерәм».

Аллаһ ризалығын алған атай менән ҡыҙы фатиха йылыһын һыуындырмаҫ өсөн, ҡайтыр юлға йәйәү сығалар.

## ТЫНЛЫҠ ВӘҒӘҘӘҺЕ

1935 йылдың яҙына атай менән ҡыҙ имен-аман баҙ өйҙәренә әйләнеп ҡайталар. Хажға барыу, татыған михнәттәре, атаһына изге Ҡөрьән китабы бүләк ителеүе хаҡында Хәнифәгә бер кемгә лә һөйләмәҫкә ҡушыла. Был турала атаһының иң яҡын дуҫғтары ғына белә, улар серҙе һаҡлай беләләр. Минһажетдин яйлап ҡына ҡыҙын ғәрәпсә уҡырға, яҙырға өйрәтә башлай. Ҡөрьән серҙәренә, ислам дине нигеҙҙәренә төшөндөрә бара. Көҙ етеүгә Хәнифә Нуркин балалары менән Арғаяштың башҡорт мәктәбенә уҡырға бара. Мәктәптә быға тиклем бер ҡасан да килмәгән көйөнә директорға: «Мин 5 класҡа уҡырға килдем!» – тип ҡәтғи рәүештә белдерә. Яҙа ла, уҡый ҙа алмаған көйөнсә Хәнифә ярты йыл буйына парта артында ултыра. Ул уҡытыусының һәр һүҙен иғтибар менән тыңлай, тиҫтерҙәренән артта ҡалмаҫҡа тырыша. Йыллыҡ излжениены «бишле»гә яҙа. Атаһынан ғәрәпсә яҙырға өйрәнеүендә лә алға китеш һиҙелә башлай. Хәнифәнең әсәһен дә эҙләп табып алалар. Улар тағы бергә йәшәй башлайҙар. Һаман да етешһеҙлектә көн күрәләр. Арғаяшта башҡорт педагогия училищеһы асылғас, 7 класты тамамламаҫ элек Хәнифә шунда талибә булып китә. Ашханала бушлай ашау, стипендияға өлгәшеү, дөйөм ятаҡта йәшәү буласаҡ уҡытыусы тормошонда мөһим роль уйнай. Уның йәшәү дәүерендә һуғышы ла, ғаилә ҡороуы ла, балалар тыуҙырып, әсәлек бәхете татыуы ла, уҡытыусылыҡ итеүе лә була. Ире Талип Шәрипов 1943 йылда һуғыштан яраланып ҡайта. Коммунист була. Ул ҡатынының ислам дине тәғлимәттәрен теүәл үтәүен, намыҙҙарын ҡалдырмауын, атаһынан ҡалған боронғо китаптарҙы уҡыуын иғтибар итмәҫкә тырыша. Хәнифә үҙенең рухи тормошон башҡаларға һиҙҙермәҫкә тырыша. Был башҡалар көлөүенән, оятҡа ҡалмаҫҡа тырышыуҙан түгел. Үҙенең диндә булыуын ҡысҡырып һөйләп йөрөү хажиәләргә хас сифат түгел, оло гонаһҡа торошло була. Ҡөрьән тәғлимәттәренә ярашлы, ул балаларына көсләп ислам дине таҡмай. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, ул һәм ҡыҙҙары әсәһенең диндә булыуына хөрмәт менән ҡарайҙар, яраталар. 1950 йылда Хәнифәнең атаһы донъя ҡуйғас, уны ерләүҙе шәкерте, Силәбе Аҡ мәсетенә нигеҙ һалыусы Ниғмәтйән хажи үҙ өҫтөнә ала. Ҡыҙы тейеш аяттарҙы тулыһынса башҡара. Был турала райкомға алып барып еткерәләр һәм күп тә үтмәй ирен тикшереүгә саҡыралар. Хәнифә Минһаж ҡыҙы бөгөн дә диндар булыуын бүтәндәргә асыҡтан-асыҡ күрһәтмәй.

## МӘККӘРӘМ ХӘБӘРСЕҺЕ

16 октябрҙә Хәнифә Минһажетдин ҡыҙына 84 йәш тула. Быйылғы йылда улар йортона алыҫтан мосафир килеп төшә. Мәккәрәм хажи ислам университеттарында белем алған. Мәкәлә уға Мәккәрәм мәсете архивына инергә рөхсәт бирәләр. Хаж ҡылыусыларҙың иҫәбен теркәү кенәгәһендә был хажи 33 йәшлек ярым һуҡыр Минһажетдин һәм бәләкәй ҡыҙы Хәнифәнең 1933 йылғы бөтә Рәсәй аслығы дәүерендә хаж ҡылыуҙары хаҡындағы яҙмаға юлыға. «Мин ишандың күптән мәрхүм икәнен һиҙә инем. Шулай ҙа ҡыҙының иҫән булыуына ышана килдем. Гүр эйәһе булып ҡалған Ғабдулла Шаҡаев менән Бишкилдәге атайыңдың ҡәберенә зыярат ҡылдыҡ. Башҡа ташландыҡ хәленә ҡалған ҡәберҙәр араһында атайыңдыҡы шул хәтлем тәрбиәле. Әйтерһең дә, Минһажетдин ишан кисә генә ерләнгән, – тип белдерә көтөлмәгән ҡунаҡ. – Миңә һинең менән осрашыу оло хөрмәт».

Ҡасандыр хаж ҡылған ҡыҙ күңеле ҡайнағанын, хәтирәләре яңырғанын белһә икән ишан. Хәниәфә өсөн атаһы рухи остаз булып торҙо. Атаһы уны яманлыҡҡа яманлыҡ менән яуап бирмәҫкә, кешеләрҙең гонаһтары өсөн Хоҙайҙан ярлыҡау һорарға, уларҙы яратырға өйрәтә килде. Үлер алдынан атаһы уға: «Хәнифә, һин ҡайҙа – мин шунда», тип әйтеп өлгөрә. Бәйғәмбәр ҡәбере янында әйткән нәҙеренә Хәнифә бөгөн дә тоғро. 11 сентябрҙә Нью-Йоркта игеҙәк башнялар ауғанда, Арғаяшта минең өләсәйемде ерләйҙәр ине. Мәйет оҙатырға килеүселәр һүҙ башланылар. Берәүҙәре американдарҙың Ираҡ мосомандарына килтергән бәләләре ошолай өсөн яза алдылар, тип ысҡындырҙы. Был хәбәрҙе ишетеп ҡалған Хәнифә Минһажева һүҙ башлаусы яғына боролоп: «Үҙегеҙгә Алла хөкөмөн алмағыҙ», – тип өндәшә. Кешелек тарафынан тыуҙырылған яуызлыҡтан, бәләнән донъя үҙ хәленә кире ҡайта.

Көтөлмәгән иртә үлеменән бер ай алда Наилә исемле ҡыҙы Хәнифәгә ошондай хәбәр һалды: «Инәй, һин кеше затынан түгелһең. Һин – фәрештәһең! Үҙ ғүмереңдә күпме һынауҙарға түҙгәнһең»...

Ҡыҙының был һүҙҙәрен атаһы бүләк иткән Ҡөрьән китабы юлдары ла раҫлай: «Кем Хоҙайға яҡын тора, уға һынауҙарҙы күберәк ебәрә. Төшкән һынауҙарҙы лайыҡлы үтеүселәрҙе үҙенә яҡынайта».

**Римма ХИБӘТУЛЛИНА,**
*баш мөхәррир.*

Махсус битте Марат Абдулвәлиев әҙерләне. Тәржемә: Нурия Иҡсанова. Мәкәләләрегеҙҙе түбәндәге адрес буйынса килтерегеҙ:
Арғаяш, Комсомол урамы, 25, «Арғаяш-Медиа». Яңылыҡтар өсөн телефон: 8 (35131) 2-01-69. Беҙҙең электрон почта: argayash-m@yandex.ru.